◆ Матбуғат – 2024

## Гәзитле лә, бүләкле лә булғығыҙ килһә...

Ә һин «Йәшлек»кә яҙылдыңмы? Тиҙҙән «Рәсәй почта»һы гәзит-журналдарға ташламалы хаҡҡа яҙылыу иғлан итәсәк. Ошо мөмкинлекте ҡулдан ысҡындырмай, баҫмабыҙға яҙылып ҡал!

«Йәшлек» гәзите лә яҙылыусыларға шәп бүләктәр әҙерләне. Квитанция күсермәләрен ебәргән тоғро дуҫтарыбыҙҙың ***электр ит үткәргесе, кухня комбайны, мультибешергес, саң һурғыс, ҡиммәтле фонарь, электр триммеры, иретеп йәбештереү аппараты, блендер*** отоу мөмкинлеге бар.

***Бергә булдыҡ, бергә ҡалайыҡ!***




12+

Ал да нур сәс халҡыңа!

# Йәшлек

31 МАЙ, ЙОМА
2024 ЙЫЛ.
№22 (11485)

Башҡортостан йәштәре гәзите | 1923 йылдан башлап сыға | Һатыуҙа хаҡы ирекле

# “Өфөлә ҙурланды китап, Белемле киләсәк юрап...”



**Баш ҡалабыҙ Өфө өс көнгә китап һәм әҙәбиәт, зыялылар һәм ҡыҙыҡһыныусылар, матурлыҡ һәм уҡыу Мәккәһенә әүерелде, тип әйтһәк, һис кенә лә арттырыу булмаç. 24 – 26 майҙа үткән Китап байрамы республиканың әҙәбиәт һөйөүселәрен Рәсәй Геройы Миңлеғәле Шайморатовтың батырлығы мәңгеләштерелгән Совет майҙанына йыйҙы. Быйыл унда Рәсәйҙең 18 төбәгенән һәм ете илдән (Белоруссия, Әзербайжан, Үзбәкстан, Ҡаҙағстан, Тажикстан, Иран һәм Ҡырғыҙстан) 233 нәшриәт һәм китап һатыу ойошмалары ҡатнашты. Китап байрамында 300-ләп әҙәби һәм мәҙәни сара, конкурс үтте. Уларҙа 173 меңдән ашыу кеше ҡатнашҡан. Өс көндә 73 мең тирәһе китап һатылған. Был һандар үҙе үк Китап байрамының әһәмиәте һәм бай йөкмәткеһе тураһында һөйләй.**

⇨12-13

◆ Иғтибар!

## Стажировка ла үт, эшкә лә урынлаш!

**Башҡортостанда предприятиеларға түләүле стажировкаға йәш белгестәрҙе ҡабул итергә мөмкинлек биргән «Күтәрелеү карьераһы» программаһы старт алды. Ул «Демография» милли проектына ярашлы тормошҡа ашырыла.**

БР Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, юғары уҡыу йорттарын һәм колледждарҙы тамамлаусылар өсөн стажировка алты айға тиклем дауам итә. Ә предприятиелар айына бер кешегә 28,8 мең һумдан иҫәпләп эш хаҡы түләү шарты менән компенсация ала.

Стажировка ярҙамында йәштәргә практик тәжрибә алыу, шулай уҡ үҙҙәрен квалификациялы белгестәр булараҡ танытыу мөмкинлеге бар. Был, үҙ сиратында, артабан эшкә урынлашыуҙы еңеләйтә.

Йыл һайын стажировканан һуң йәштәрҙең 75 проценттан ашыуы даими эш урынын таба.

## Үҫмерҙәр ҙә каникулын бушҡа үткәрмәй

**Республикала йәйге каникул ваҡытында 14 йәштән өлкән мәктәп уҡыусылары 3600-ҙән ашыу вакансия буйынса эшкә урынлаша ала. Эш биреүселәр үҫмерҙәргә вожатый, һатыу буйынса менеджер ярҙамсыһы, ярымфабрикаттарҙы тултырыусы, курьер, биләмәләрҙе төҙөкләндереүсе һөнәрҙәрен тәҡдим итәсәк.**

Уҡыусылар эш табыу өсөн мәшғүллек үҙәктәренә мөрәжәғәт итергә тейеш. Шулай уҡ буш вакансияларҙы «Работа России» порталынан ҡарарға була.

Үҫмерҙәргә эш хаҡы менән бергә мәшғүллек үҙәктәренән 1,8 меңдән алып 2,8 мең һумға тиклем матди ярҙам түләнә.

Былтыр республикала йәйге каникулда 10 мең мәктәп уҡыусыһы эшләгән.

**З. ХӘСӘНОВА.**

| | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| **3 июнь,** дүшәмбе | **4 июнь,** шишәмбе | **5 июнь,** шаршамбы | **6 июнь,** кесе йома | **7 июнь,** йома | **8 июнь,** шәмбе | **9 июнь,** йәкшәмбе |
| **Аяҙлы-болотло** | **Аяҙлы-болотло** | **Аяҙлы-болотло** | **Аяҙлы-болотло** | **Болотло** | **Аяҙлы-болотло** | **Аяҙлы-болотло** |
| **Көндөҙ: + 25, төндә: + 12** | **Көндөҙ: + 26, төндә: + 15** | **Көндөҙ: + 24, төндә: + 14** | **Көндөҙ: + 24, төндә: + 16** | **Көндөҙ: + 25, төндә: + 13** | **Көндөҙ: + 21, төндә: + 12** | **Көндөҙ: + 21, төндә: + 12** |
| Ел көньяҡ-көнбайыштан, 2 м/с | Ел көньяҡтан, 2 м/с | Ел көньяҡ-көнбайыштан, 2 м/с | Ел көнбайыштан, 2 м/с | Ел көнбайыштан, 3 м/с | Ел көнбайыштан, 2 м/с | Ел көньяҡ-көнбайыштан, 2 м/с |

«Гисметео».

1445 һижри йыл, Зөлҡәғиҙә айының 23-сө көнө

Ҡояш ҡалҡа – 4.49, байый – 21.38. Көн оҙонлоғо – 16.49.